*Рәмилә ЙӘҺҮҘИНА*

# Башҡорт театры һәм Иманский

*Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына нигеҙ һалыусы, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы* ***Вәлиулла Мортазин-Иманскийҙың*** *тыуыуына 120 йыл.*



*Вәлиулла Мортазин-Иманский*

Уңдырышлы тупраҡта тамыр йәйгән башҡорт театрының тарихы һәм яҙмышы беҙҙе бөгөн дә үҙенә генә хас ижад юлының киң ҡоласлығы, үҙенсәлекле булыуы менән һоҡландыра. Театр республикабыҙҙың йәштәше, тимәк, уның тыуыуы, үҫеп китеүе халыҡтың теләгендә һәм рухында булған.

Сәнғәтебеҙҙең бөгөнгө үҫешенә юл ярыусылар хаҡында һүҙ алып барғанда, иң элек беҙ Вәлиулла Ғайназар улы Мортазин-Иманскийҙы театрға нигеҙ һалыусы булараҡ күҙ алдына килтерәбеҙ, ҙур ойоштороу һәләте талап иткән ижади эшмәкәрлегенән сығып, үлсәмдәргә һыймаҫ тырышлығын оло хөрмәт менән иҫкә алабыҙ.

Мортазин Вәлиулла Ғайназар улы (Иманский — псевдонимы) 1885 йылдың 4 декабрендә Ырымбур губернаһының Мораптал волосына ҡараған Иманғол ауылында (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Октябрь районы) крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Сәнғәттәге юлы 1905—1907 йылғы революция осоронда башлана. Уның исеме Волга буйы, Урал, Урта Азия, Кавказ халыҡтарының бер-береһенә туранан-тура бәйләнеше булған театр мәҙәниәтен тәү башлап ойоштороусы эшмәкәрҙәр араһында лайыҡлы урын алып тора.

Ошо талантлы эшмәкәрҙәр менән бергә Вәлиулла Мортазин да илебеҙҙең төрки телле халыҡтары өсөн театр сәнғәтенең художестволы формаһын үҙләштереүгә, уның тормошсан йөкмәткеһен раҫлауға, стиль һәм эш алымдарын эшкәртеүгә күп көс һала. Әле иконсе буржуаз-демократик революцияға тиклем үк ул йәш башҡорт интеллигенцияһына яҡыная, улар менән берлектә театр труппаһы ойоштора һәм Ырымбур ҡалаһын, Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондарын эш урындары итеп билдәләй. В.Ғ.Мортазин-Иманский башҡорт сәнғәтен ул замандарҙағы төрлө лозунгтарҙа һәм агитацияла күрһәтелгән бурыстарҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлтә. Ырымбур мосолман хәрби-революцион

комитеты һәм Башҡортостан Ваҡытлы Революцион советы (1918 йыл) менән тығыҙ бәйләнештә эш алып бара. Ә граждандар һуғышы башланғас, ул үҙенең коллективын бер ниндәй икеләнеүһеҙ ҡыҙылдар яғына алып сыға, үҙе 1-се армияның политик бүлеге эргәһендә ойошторолған ”Мосолман драма труппаһы”ның етәксеһе булып китә. Шулай итеп, Мортазин-Иманский театры шул осорҙағы тарихи ваҡиғалар эсендә ҡайнай. Театр үҙ репертуарын заман талабынан сығып төҙөй, артистар сығышында филармония жанрҙары менән бергә драматик миниатюралар, халыҡ хореографияһы, милли йолалар һәм уйындарҙың театрлаштырылған тамашалары күрһәтелә. Шулар иҫәбендә, мәҫәлән, Афзал Таһиров етәкләгән башҡорт драматургтарының агитацион әҫәрҙәрен сәхнәгә ҡуйыуҙы, Софокл, Шиллер, Гоголь, Островский, Луначарский кеүек авторҙарҙың пьесаларына мөрәжәғәт итеүҙе атап китергә мөмкин.

Петроградты һаҡлауҙа ҡатнашыусы ҡыҙыл башҡорт полктарын хеҙмәтләндереп ҡайтҡан хәрби театр труппаһы 1919 йылдың 8 ноябрендә Стәрлетамаҡтағы ”Мираж” кинотеатры бинаһында ”Аҡшан батыр” спектаклен күрһәтә. Ошо труппа базаһында 1919 йылдың 4 декабрендә Башҡорт дәүләт театры ойошторола. Уның художество етәксеһе һәм режиссеры итеп В.Мортазин-Иманский тәғәйенләнә. Ошо көндән алып ул үҙенең бөтә көсөн һәм һәләтен башҡорт театр сәнғәтен үҫтереүгә, уның репертуарын формалаштырыуға, профессиональ артистар һәм драматургтар тәрбиәләүгә арнай.

1922 йылда элекке Өфө губернаһы районларының БАССР-ға ҡушылыуы арҡаһында Стәрлетамаҡ труппаһы республиканың яңы баш ҡалаһы Өфөгә күсеп килә. Ике йыл үтеүгә бында илебеҙҙең милли театрҙары араһында иң тәүгеләрҙән булып Башҡорт күсмә театры ойошторола. 1924 йылдың 24 майында Хеҙмәт һәм Сәнғәт һарайы (хәҙерге Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бинаһы) алдында ошо күсмә театрҙы тәү тапҡыр алыҫ сәфәргә оҙатыуға арналған байрам митингыһы үткәрелә, унда ҡотлау һүҙе менән Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафури сығыш яһай. Дәртле музыка оҙатыуында ун ылау Стәрлетамаҡҡа ҡарай юл ала.

Әммә был ылауҙарҙы халыҡтың төрлө вәкилдәре төрлөсә ҡабул итә. Мәшһүр ҡурайсы Ғата Сөләймәнов иҫтәлектәрендә ошолай яҙа: ”Бер ваҡыт Вәлиулла Мортазин-Иманский етәкселек иткән театр труппаһы ауылдан-ауылға йөрөй, беҙгә лә киләсәк икән, тигән хәбәр таралды. Беҙҙең Теләс волосы Беренсе Төрөкмән ауылы халҡы, айырыуса комсомолецтар, коммунистар театр килеүен шатлыҡ менән көтә башланы. Ә инде мулла, байҙар, йома көнө булмаһа ла, йәйләүҙән ауылға ҡайтып, дингә ышанғандарҙы мәсеткә йыйып: ”Ауылға халыҡты юлдан яҙҙырыусы бәндәләр килә! Дингә ҡаршы һүҙ алып баралар, кәмит күрһәтеп, кешеләрҙең күҙен бәйләйҙәр. Уларҙың артынан дәжжәл килә, заман ахыры буласаҡ”, — тип вәғәз һөйләгәндәр. Өҫтәүенә, мулла, кем дә кем большевик, комсомол ҡотҡоһона бирелеп, кәмит күрһәтеүсе бәндәләрҙе ҡарарға бара, бәддоға ҡылам, тип ҡурҡытҡан. Беҙ ҡунаҡтарҙы ”аҡ менән ҡаршы алайыҡ”, тип бер мискә ҡымыҙ, бауырһаҡ, ҡурылған ит, сейәле май алып, дуғаға ҡыҙыл флагтар, ҡыҙыл таҫмалар тағып, Төйәләҫ туғайына киттек. Бына бер саҡ Төйәләҫтең уң яҡ ярындағы Түбәләс башында күҙәтеп тороусы һыбайлы,

ҡамсыһына бәйләнгән ҡыҙыл таҫманы баш осонда болғай-болғай, беҙгә ҡарай юлланды, артистар килеүен хәбәр итте. Халыҡ ҡунаҡтарҙы уратып алды, ҡул биреп күрешеү, танышыу китте. Шул саҡ мыҡты кәүҙәле бер артист, күҙлеген ҡулъяулығы менән һөртә-һөртә алға сығып:

— Азаматтар, беҙҙе асыҡ йөҙ менән ҡаршы алыуығыҙ өсөн һеҙгә рәхмәт! Беҙ Өфө ҡалаһынан һеҙгә сәләм килтерҙек. Сәләм менән бергә бүләк итеп йыр, ҡурай моңо һәм спектакль алып килдек. Мин театр труппаһы етәксеһе Вәлиулла Мортазин булам, — тине.

Бер аҙҙан ҡунаҡтарҙың береһе Төйәләҫ туғайын яңғыратып ҡурай уйнап ебәрҙе. Мортазин ағай яғымлы тауыш менән: ”Уйна бейеү көйөн, Бәҙәр ханымды бейетеп алайыҡ”, — тиеүгә бер апай ”Зарифа”ға төшөп тә китте. Ул туҡтауға Вәлиулла ағай: ”Йә, Ғиниәт ҡусты, үҙеңдең Бөрйән башҡорттарыңа бейеп күрһәт әле, бәлки, танырҙар”, — тине. Шул саҡ Ушанов ағай һалмаҡ хәрәкәттәр менән ”Байыҡ”ҡа баҫа башланы. Ул ялбыр ҡара сәстәрен төҙәткеләп, ярһып, тулҡынланып, дәртләнеп бейене. Ҡарап тороусылар, беҙҙең яҡтың ир-егете икәне күренеп тора, йөҙ йәшә, тип маҡтанылар. Ғималетдин Минһажевтың — тальянда, Хәбибулла Ибраһимовтың скрипкала уйнауын халыҡ иҫе китеп тыңланы. Таңһылыу Рәшитова апай үҙенең йыр-моңо менән әсир итте. Артистарҙы ауылға алып киттек. Төрөкмән күперенән сығыуға ике һыбайлы сабып килде лә:

— Мулла абзый, аҡһаҡалдар артистарҙы ауылға индермәҫкә ҡушалар, кәмит күрһәтергә рөхсәт итмәйҙәр, — тинеләр.

— Беҙ үҙ ҡул көстәре менән йәшәүселәргә кәмит түгел, спектакль уйнарға килдек, — тине Мортазин ағай ҡыйыу рәүештә һәм 30-лаған арбаға тейәлгән артистар мәктәп алдына килеп туҡтаны. Ауыл халҡы шунда уҡ ҡунаҡтарҙы өйҙәренә алып та киттеләр...

Бына шулай юл яра халыҡ күңеленә яңылыҡ. Өс ай эсендә күсмә театр 42 тамаша күрһәтә. Күренеүенсә, был ғәҙәти генә гастроль булмаған. Уның абруйын самалау өсөн 1925 йылда Мәсәғүт ауылында 8 мең тамашасы йыйылыуын әйтеү ҙә етә. Ауылдарҙа Дауыт Юлтыйҙың ”Ҡарағол” трагедияһы

*М.Буранғолов, ”Башҡорт туйы” . Ханнан бай ролендә Вәлиулла Мортазин*



айырыуса ҙур уңыш ҡаҙана. 1935 йылда Мәскәүҙә гастролдәр ваҡытында 400-сө тапҡыр күрһәтелгән был сәхнә әҫәренә ул осорҙа М.Ғафуриҙың ”Ҡыҙыл йондоҙ”, А.Таһировтың ”Баймаҡ”, В.Мортазин-Иманский үҙе яҙған ”Салауат менән Пугачев” спектаклдәре өҫтәлә. 1935 йылдың 10 ғинуарында коллективҡа ”академия театры” тигән юғары исем бирелә.

Ул йылдарҙағы һәр спектаклгә ”халыҡ тамашаһы” тигән билдәләмә ҡуйып булыр ине. Ҙур уңыш менән барған ”Ғәлиәбаныу”, ”Ашҡаҙар”, ”Башмағым”, ”Ынйыҡай менән Юлдыҡай” спектаклдәре айырыуса популяр була. Әйткәндәй, М.Фәйзиҙең ”Ғәлиәбаныу” мелодрамаһын Иманский үҙ редакцияһында тәүләп профессиональ сәхнәгә сығарыусы. Иманский спектаклдәренең ирекле образы — халыҡ восстаниеһы, изге йолалар, ғаилә һәм йәмғиәт байрамы, һунар, һуғыш һ.б. Сәхнә формалары һәр саҡ халыҡтың эпос, легендаларына, йолаларына, поэтикаһына ҡорола. Өҫтәүенә, Европаның театр системаһын ентекле өйрәнеү, урыҫ сәхнәһе тәжрибәһен файҙаланыу Иманскийға театр фәлсәфәһе идеяларын һәм принциптарын киң асырға ярҙам итә.

В.Мортазин-Иманский башҡорт театр сәнғәтен үҫтереүгә талантын һәм көсөн ҡыҙғанмай. Бына мәшһүр актриса Зәйтүнә Бикбулатованың хәтирәләренән юлдар: ”Хәҙер инде күренекле татар драматургы, ул саҡта Өфөнөң әүҙем театр тәнҡитселәренең береһе булып танылған Нәҡи Иҫәнбәт тә Вәлиулланы, яҡын күреп, юҡҡа ғына ”хәйләкәр төлкө” тип атамағандыр. Беҙ үҙебеҙ иһә уны яратып ”аҡ ат” тип йөрөтә торғайныҡ. Был ҡушамат уға М.Буранғоловтың ”Башҡорт туйы”н сәхнәгә ҡуйырға әҙерләнгәндә бирелде. Ул спектаклдә сәхнәгә сығасаҡ аттың аҡ төҫтә булыуын теләне. Бында шулай уҡ уның ат кеүек эшләүе лә иҫәпкә алынды. Мин унда иң тәүге ҙур ролдәремдең береһе булған Килен образын башҡарҙым. Сәхнәгә ап-аҡ ат өҫтөндә килеп сыҡтым...”

Актер булараҡ В.Мортазин-Иманскийҙың репертуары 500-ҙән ашыу ролде үҙ эсенә ала. Улар араһында — Фердинанд (”Мәкер һәм мөхәббәт”), Карл һәм Франц Моор (”Юлбаҫарҙар”, Шиллер), Хлестаков (Н.В.Гоголь, ”Ревизор”), Альмансур (Г.Гейне, ”Альмансур”), Егор Булычев (М.Горький, ”Егор Булычев”), Салауат Юлаев (Ф.Сөләймәнов, Д.Юлтый әҫәрҙәре буйынса, К.Тренев, ”Пугачевщина”), Йомағол (М.Буранғолов, ”Ашҡаҙар”), Юлдыҡай (Х.Ғәбитов, ”Ынйыҡай менән Юлдыҡай”) һәм башҡа образдарҙы атап китергә мөмкин.

1937 йылда Иманский ҡулға алына һәм 1938 йылдың 10 июлендә хәрби коллегия хөкөмө буйынса атыла. Репрессия ҡорбаны булараҡ ул бары тик 1957 йылда ғына аҡлана.

Вәлиулла Ғайназар улы Мортазин-Иманскийҙың театрыбыҙға нигеҙ һалыу барышындағы ижади эшмәкәрлеген, ижад концепцияһын нығыраҡ өйрәнгән һайын, уның көслө театр теоретигы һәм әүҙем йәмәғәт эшмәкәре булыуына һоҡланаһың. Ул театрҙың классик формаһын башҡорт халҡының художестволы фекер йөрөтөү рәүешенә ҡыйыу бәйләй алған, йәғни халыҡтың тәбиғи, рухи асылын, халыҡ сәнғәте традицияларын классик сәнғәттең поэтик юғарылығына күтәреүгә өлгәшеүе менән башҡорт театр донъяһында лайыҡлы урын биләй.